# Күçәкби

/Бәрйән тарихе тураһында/.

Бынан бик күп йылдар элек хәҙерге Мәсем тауы тирәһендә Мәсемхан йәшәгән. Мәсем хан бик күп ерҙәрҙе биләп, уның кул аҫтында ете ырыулыкбулған. Был ырыулыктарҙың башында ырыу башлыктары- батырҙар торғандар.

Мәсемхандың кырк улы, бик матур бер кыҙы булған. Бер көндә хандың кырк улы кырк дөйә менеп юлға сыккан. Юлда уларға уҫал януар осорап, кырк төйәне, хандың утыҙ биш улын кырып ташлаған. Тик биш кенә егет был бәләнән касып котолоп, Мәсемханға хәбәр иткәндәр. Мәсемхан аптырап калған. Ул ат еткән ергә ат саптырған, хат етер ергә хат ебәреп, ете ырыулыкка ла хәбәр иткән. Хандың сакырыуын ишетеп, батырҙар кулдарына һөйәк һаплы һөңгөләр, алмаз кылыстар, сукмарҙар алып, атырға менгәндәр. Алты ырыу башлығы үҙҙәренең күп батырҙары менән Мәсем ханға килеп тә еткәндәр. "Бәрйән" ырыуының башлығы Караколөмбәттә үҙенең ике йөҙ илле батыры менән килгән. Тик иң алыҫ "кыпсак" ырыуының башлығы Бабысак би генә килеп етмәгән. Ул хат алғас та, һигеҙ батырын алып, юлға сығырға йыйына. Уның яңырак кына алған Иәмилә исемле катыны Бабысак биҙең юлға сығарын белеп, уны ебәрергә теләмәй, уға ялына башлай.

Иәмилә бик матур кыҙ була. Бабысак уны Урта Азия яғынан үҙенә катынлыкка алып кайткан. Иәмилә бик инәлеп, ялуара башлағас, Бабысак уны үҙенең янына ултыртып, уның оҙон сәстәрен һыйпап, өгөтләй башлай: -"Кайғырма, Иәмиләм, Мин иҫән-һау әйләнеп катырмын,- ти ҙә Иәмиләне күкрәгенә кы-

сып, үбеп ала. Иәмиләнең нисер һисенеп йөрәге ярһый, уның эсе күс йәштәре иренең янып торған сикәләренә тамам. Быны күргән Бабысак:

- Өсгәләнмә, илама, Иәмиләм, мин һине бер вакытта ла яңғыс калдырмам,- ти. Башын аска эйә лә һуңғы тапкыр йәп-йәш катынына әйләнеп карай, уның йомшак кулдарын күкрәгенә килтерә лә әйтә:

- Әгәр мин кайта алмаһам, һин яңғыс түгел, тиссән һин ир бала тыусырырһың, ул һиңә ярсамсы булыр.

Шулай тигәс атына атланып, Мәсем ханға карай юлға сығып китә. Был вакытта Мәсем хан эргәһенә алты ырыу башлығы үсәренең батырсары менән йыйналып бөтөп, Бабысакты көтәләр. Мәсем ханға етмәс элек өс көн алда Бабысак менгән ат тояктарының тауышы ишетелә. Өсөнсө көн Бабысак үсенең һигес батыры менән Мәсем ханға килеп етә. Бөтәһе лә уны каршы алалар. Хатта, атаһының тыйыуына кармастан, хандың кысы ла Бабысакты күреп, каршы алыу өсөн юлға сығып карап тора. Батырсар бөтәһе лә йыйналып бөткәс, Мәсем хан уларға кот оскос януарсың кырк каруанды кырып, улдарын үлтереүен һөйләй, ошо януарсы үлтерергә куша, януарсы үлтергән кешегә ярты байлығымды, кысымды бирәм, тип вәгәсә итә. Батырсар юлға сығалар. Дүрт батыр тәүсә бергә йөрөйсәр. Һуңынан кәңәшләшеп, дүртеһе дүрт якка китә.

Бабасык яңғыс кәйөнсә урмандар, яландар, йылғалар, туғайсар үтә. Осак әсләнеп йөрөй торғас, бик бейек бер тауға килеп сыға. Ук-һасактарын ергә куйып, хәл ала ла бейек тау башынан тирә яктарсағы урман-яландарға ентекләп карап сыға. Шул вакыт сур яландың уртаһында күбә

дәүмәлендәге бер нәмәнең ятыуын күрә. Әҙләй торған януарҙың шул икәнен белгәс, эргәһендә яткан баш ҙурлык ташты алып,, януарҙы уятыр өсөн ырғыта.Таш януар эргәһенә барып төшөп, ерҙе актарып инеп китә. Януар һиҫкәнеп башын калкыта ла тора башлай.Шуны ғына көтөп торған Бабысак уғын төҙәп атып ебәрә: ук януарҙың түшенә каҙала.Януар которонеп ерҙе тырнай, үкерә башлай.Уның тауышына якын тирәләге тауҙар һелкенеп китә, урмандар шаулап куя. Вакыт үткән һайын януар көсһеҙләнә, хәлдән тайып йығыла.

Бабысак уның йығылғанын күреп, тауҙан төшә лә януар эргәһенә килә. Януарҙың уң колағын кыркып ала-колак каный. Уғын һурып алып уртаға яра ла яртыһын януарға каҙай, яртыһын үҙе менән алып кайта.

Кискә табан үлеп яткан януар янына Каракөләмбәт килеп сыға.Ул үлеп яткан януарҙы ук менән ата, януар кыбырҙамай, Каракөләмбәт якын килеп, калған һул колакты киҫеп ала ла кайтып китә. Тик Караколәмбәт киҫеп алған колак канамай. Мәсем хан эргәһенә килеп,киҫеп алып кайткан януарҙың колағын күрһәтә, уны үҙем үлтерҙем тип ышандыра. Мәсем хан "януарҙы үлтереүсе" батырҙы хөрмәтләп, үҙендә кунак итә, кыҙын биреп туй ҙа үткәрмәк була.Бөтә халк йыйналғас, йырткыс януарҙың Караколәмбәт тарафынан үлтерелеүен һөйләп бирә, туй иғлан итә. Туй башланғас,Бабысак түҙмәй хан эргәһенә бара ла:

- Туйҙы яңылыш үткәрәһегеҙ,хан, януарҙы Караколәмбәт үлтермәне, мин үлтерҙем,- ти ҙә ярык уғын, кыркып алған колакты күрһәтеп,- бына уң колағы,мин кыркып алғанда януар үлеп етмәгәйне- каны акты, бына минең аткан ук,

уның яртыһын яңуарҙың эсенә тығып киттем,- ти. Мәсем хан аптырауға кала.Дәрәҫләктә белеү өсөн айырым кешеләр ебәрә.Ебәрелгән кешеләр Бабысактың әйткәндәрен дәрәҫләп,укты коршап ханға күрһәтәләр.Хан туйҙы Караколәмбәткә үткәрмәй, Бабысакка үткәреү тураһында әйткәс, Караколәмбәт бик нык асыулана, гәрлегенән туйҙы ташлап китә. Тышка сығып, үҙенең батырҙарын йыйнай, Бабысакты үлтерергә әҙерләнә. .Кемдер шул сак өйгә инеп, һамактап әйтә:

Бабысак батыр аң торһон,-
Караколәмбәт күҙ һала,
Асыуынан, гәрлегенән
Иөрәгендә ут яна.

Бабысак батыр быға каршы һамактап бөтә халк алдында кыйыу итеп яуап бирә, аптырап тороп калмай:

Дошманымдан еңелгән-
Мин булмайым,
Унан куркып муй ынымды
Мин бормайым,- ти.

Бабысактың был һүҙҙәрен ишетеп,Караколомбәт ишектән кара янып килеп инә лә Бабысакты уғы менән ата.Бабысак унан:

- Ирлегең юк, куркак!- тип кәлә лә йығыла, күп тә ятмай үлә.Караколәмбәт үҙенең 250 батыры менән Бабысактың "Кыпсак" ырыуына каршы һуғышка әҙерләнә. Бабысактың гәүҙәһен батырҙары "кыпсак"ка алып кайтып күмергә итәләр, ләкин Караколәмбәт алып кайттырмай. Үлгән ерендә күмергә Караколәмбәт ер ҙә бирмәй.Кыпсак

халкы үҙенең батырын кәҙер-хөрмәтһеҙ күмергә теләмәйенсә, батырҙар Кыпсакка кайтып мәркеләр менән Кыпсактан Мәсем яғына ер ташып, Бабысакты хөрмәтләп күмәләр. Бабысактың кәбере өҫтөнә ҙур тау үҫеп сыға. Караколөмбәт быны күреп, Кыпсак халкын туҙҙырыу өсөн бөтә ғәскәре менән Кыпсак еренә сыға, Бабысактың катыны Иәмиләне үлтереү өсөн уның ауылына бара. Иәмилә өйҙә яңғыҙ ултыра. Караколөмбәт килеп ингәс тә Иәмиләнең һылыулығына һокланып, үлтерергә баҙнат итмәй, үҙенә катынлыкка алмаксы була. Бөтә Кыпсак ырыуын буйһондороп, Иәмиләне үҙе менән алып үҙ еренә кайта. Улар Иәмилә менән донья көтәләр. Караколөмбәт күп вакытын һунарҙа йөрөп үткәрә. Иәмилә өйҙә бикле ултыра. Ул ире Бабысакты уйлап, көн-төн кайғыра, бер генә көндө лә иламайынса үткәрмәй, Караколөмбәтте күрә алмай, үҙенең батырын һағына.

Бер көндө кис, эңер төшөп күҙ бәйләнгәс, Караколөмбәт Иәмиләне аулак бүлмәгә индерә лә кыл аркан менән уның корһағын быуа. Ул "Бабысак бейҙән бала һалғандыр, баланы төшөртергә кәрәк" тип уйлай. Иәмиләгә түҙеүе бик ауыр була башлагас, инәлеп-ялуарып та карай, ләкин Караколөмбәт уға карап, тештәрен ыржайтып көлә. Караколөмбәт Иәмиәне бик нык ыҙалата, ғазаплай. Иәмилә, башкаса түҙер хәле калмагас, ни булһа ла булыр тип Караколөмбәткә шундай һүҙ әйтә:

- Һин мине ыҙалама юкка, миндә бер нәмә лә юк. Ышанмаһаң бәхәс итәм: кара тана әгәр быуаҙ булһа, минең балам булыр, тыу булһа, минең бер нәмәм дә булмаҫ.

Иәмилә, шул һүҙҙәрҙе әйтеүгә хәлдән тайып, иҙәнгә йығыла, Каракoлөмбәт бик ашығыс кара тананы һуырға куша. Иәмиләнең бәхетенәндерме инде, кара тана тыу булып сыға. Каракөлөмбәт ыҙынлап та Иәмиләнең һүҙҙәренә ышана. Бер бер артлы көндәр, айҙар үтәләр. Иәмиләнең ауырлы булыуын белгәс, Каракoлөмбәткә ул "һинән ауырлымын" тип ышандыра.

Иәмиләнең ир балаһы тыуа.Бала тыуған да ук бик етеҙ хәрәкәт итә, теремек була. Был сакта Каракoлөмбәт һунарҙа йөрөй.Бала тыуыуға ун көн тигәндә, ул һунарҙан кайта.Ир бала тыуыуға ул бик кыуана,баланы күрер өсөн бишек янына килә. Ун көнлөк бала Каракoлөмбәттең кәзә һакалы кеүек ослайып торған һакалына йәбешеп, һелкетә тартып ала.Баланың бармактарында әйәк ите менән йолкоп алған һакал бөртөктәре тороп кала. Каракoлөмбәт ни эшләргә лә белмәй, усы менән канлы әйәген баҫып, бишек эргәһенән ситкә китә. Ай һай!.. тигән төҫ менән башын сайкап куя.Күҙҙәренә уттар күренеп кала Каракoлөмбәттең.

Иәмилә батырынан калған берҙән бер төҫ итеп, улына Күҫәкби тип исем куша.Күҫәкби бер йәшенә еткәс, урамда ун йәшлек балалар менән бергә уйнай башлай. Ат башынан төшмәй үҙе,сапканда ла коламай аттан.Гәүҙәгә лә ун йәшлек бала ҙурлығында нык, таҙа, баҙык була. Уйнаған вакытта малайҙарҙың береһе лә Күҫәкбигә каршы тора алмайҙар. Ул малайҙарҙың йә аяктарын һындырып, йә кулдарын каймыктырып,йә баштарын тишеп кайтара.Барыһы ла аптырашта калалар.

Берҙән бер көндә Күсәкби уйнап йөрөгән вакытта бер картайып бөткән сал сәсле әбей уны саҡырып ала ла:

- Һин, улым, бик көслө булһаң былай, атайыңдың конон алыр инең.Караколөмбәттән халктың канлы күҙ йәшен түк-термәҫ инең!- тип уның сәстәренән һыйпап, арҡаһынан һөйә.

- Минең атайым бар бит, нишләп мин уның конон алайым ти?- тигән икән Күсәкби.

- юк,- тигән әбей,- һинең атайың быңдай яуыз түгел ине, ул ил батырын,һинең атайың булған кешене,Караколөм-бәт үлтерҙе. ысын атайыңдың канын наһактан Караколөмбәт койҙо, уның һинең атайың түгел, балам. Сал сәсле әбейҙең күҙенән атылып сыккан йәштәр Күсәкбиҙе ышандыра. Әбей уға бөтә булған вакиғаны баштан-аяк түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә, әсәйенән һорарға куша.

- Әгәр әсәйең әйтмәһә, курмас кыҙҙырт та эҫе көйөнсә усына баҫып кара.- ти әбей,- ул һиңә бөтәһен дә һөйләп бирер,- ти.

Күсәкби өйгә кайтып әсәһенән:

- Әсәй, дөрөҫөн генә әйт, кайҙа ул минең үҙ атайым?- тип һорай.Әсәһе ауыр көрһөнөп куя ла:

- Ана бит атайың бар, тағын һиңә ниндәй атай кәрәк?- ти.

Күсәкби күпме генә инәлеп караһа ла Иәмилә бер нәмә лә һөйләмәй, һаман да бер үк яуапты бирә.Кис булғас, Күсәкби әсәһенең муйынына аҫылынып иркәләй ҙә:

-Әсәй,- ти,- минең бик курмас ашайһым килә,курмас кыҙҙырып бир,- ти.

Иәмилә, улының һорауын кире какмайынса, сулмак

ултыртып курмас кыҙҙыра. Күҫәкби курмастың һыуынныуын көтмәйенсә:

-Әсәй, тиҙерәк алып бир миңә курмас!- ти.

Иәмилә кашык менән курмас алып бирә, ә Күҫәкби алмай,һауытка һалып бирә- алмай, "үҙең ал" тип әсәһенә үпкәләй башлай:

- Әсәй, һин миңә усың менән килтерә торғайның бит!- ти. Иәмилә үҙе курмасты усына алып, улына һона. Күҫәкби, уттай эҫе курмасты, әсәһенең усына кыҫа ла:

- Әсәй! Әйт! Минең атайым кайҙа?- ти. Иәмилә усының янғыуына сыҙай алмай,һөйләргә мәжбүр була:

- Дөрөҫ, улым, һинең атайың Караколөмбәт түгел, ул һинең атайыңды үлтереүсе,- тип, бөтә башынан үткәндәрен һөйләп бирә.

Ошо көндән алып, Күҫәкби Караколөмбәтте дошман күрә башлай, унан үс алыу юлдарын эҙләй башлай.

Бер нисә йыл үткәс, кунакка киткән еренән ғәйеп була, кайтмай.Ун йәшкә еткәс, үҙенә батыр дуҫтар табып, Кыпсак ерен Караколөмбәттән коткарырға йыйына. Был вакыт эсендә Күҫәкби ҙур үҫә, шулай ҙа әсәһен бик һағына, уны күргеһе килә. Иҫке-боҫко кейем кейенеп ала ла әсәһе торған ауылға сығып китә. Иәмилә инде картайып, кайғы-хәсрәттән һарғайып, өйҙә ултырған була.Күҫәкби килеп инеп, Иәмиләнән хәйер һорай. Әсәһе ойотткан койоп бирә.Күҫәкби кеҫәл кеүек каты ойотканды өскә бүлә лә ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн калдырып сығып китә. Иәмилә хәйерсе булып килгән улын танымай. Караколөмбәт кайткас, үҙҙәренә инеп сыккан хәйерсенең ойотканды өскә бүлеп, ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн

калдырып китеүен һөйләп бирә. Быны ишеткәс тә Караколөмбәт ниҙер булаһын һиҙенеп, бошона бик нык кайғыра башлай.Ойотка менән булған хәл якшыға түгел икәнлеген белә.Күҫәкби 150 батырҙан торған ғәскәр йынап, коралландыра ла Караколөмбәткә каршы яуға сыға. "Караколөмбәт нәҫеленән бер генә кешене лә калдырмай кырып бөтөрәм" ти Күҫәкби. Һуңғы сиктә Караколөмбәт каршылык күрһәтә алмай,касып йәшеренә.

Күҫәкби Караколөмбәт нәҫеленән булған бөтә йәнде кырып бөтөп,Караколөмбәт ауылына килә. Караколөмбәтте эҙләп табырға куша.Ауылдан алыҫ түгел ырҙында ун өс йәшлек бер кыҙ бала тап була.Күҫәкбиҙән куркып ул:

-Батыр, үлтермә, мин Караколөмбәт нәҫеленән түгелмен,һигеҙ йәшемдән алып уның һарыктарын ғына көтәм,- ти Күҫәкби:

- Ярай, мин һиндәйҙәргә теймәйем.Тик һин миңә Караколөмбәттең кайҙа касканын әйтмәҫһеңме? тигәс,

- Әйтәм,- тигән кыҙ шатланып,- ул ана ырҙын аҫтына йәшеренгән.

Күҫәкби ырҙынға барып:

- Караколөмбәт, сык! ырҙынды хәҙер үртәйем!- тип кыскырған икән, куркыуынан кобараһы оскан, кәкерәйгән Караколөмбәт килеп сыккан. Күҫәби уның кейемен сисендереп,шыр яланғас калдырған да танауынан тишеп, еп үткәргәс, уны яланғас хәлендә кара һыйырға артка каратып атландырып, Кыпсак ауылына табан алып кайтып китә... Кыпсактағы һарағы ауылына килтереп, мәсхәрәләп йөрөтә. Бер йылға буйында кара һыйыр үлеп кала.Йылғаны Кыпсактар

кара һыйыр үлгән йылға тип йөрөтә башлайҙар. Унан һуң Күсәкби Караколөмбәтте кыҙыл һыйырға атландырып, һарағыға кире килтерә. Иәйләүҙәрҙә кеше күрһен тип, Өмбәткә килтерә, Өмбәттән Байназарға Ағиҙел аша сығарып, Байназар эргәһендәге бейек тауға мендереп, Караколөмбәтте коро казанға һалып кура. Курылған вакытта сыккан тоҙлоғон бармағы менән ялап, теге сал сәсле әбейҙең һүҙҙәрен үтәгәнен белдереп:

- Кон алынды! - тип кыскыра Күсәкби. Караколөмбәт шул тау башында кара янып казанда күмергә әйләнә.

Шуға ла хәҙер был тауҙы Курыуҙы тауы, Курылды тауы тип йөрөтәләр. Курылды тауының башындағы имәнлек араһында һаман да әле Күсәкби казан ултырткан таштар ята. Ә Караколөмбәттең хурлыкка сыҙай алмай кара һыйыр к аркаһында Күсәкбигә:

- Мине былай ыҙалаткансы, атай, сал шул урында! - тип кыскырған ялан ерен хәҙер "Атайсал" яланы тип йөрөтәләр.

Күсәкби Караколөмбәтте кыйраткас, Караколөмбәттең бер улы касып барғанда, Күсәкби уны кыуып тормаған, куғын һелтәп:

- Ярай инде, калһын әйҙә бер йән! - тигән. Әнә шул бер йән теге көтөүсе кыҙ менән урманға китеп, уларҙан хәҙерге Бөрйән кешеләре таралған. Бөрйән бына шул бер йәндән килеп сыккан ул.

Был легенда 1950 йылдың ғинуарында Бөрйән районының Иҫке Монасип ауылындағы 74 йәштәге карт һунарсы Муллағолов Гелмеҙдин бабай һөйләүе буйынса яҙып алынған. Рәшит Ғарипов. 24/VIII-52.